***Ҡамса МОРТАЗИН***

# Йырлы күңел

*Факиһа Сафинаны Силәбе ҡалаһы Металлургтар мәҙәниәт һарайында 40 йылдан ашыу эшләп килгән ”Айгөл” башҡорт һәм татар йыр-бейеү ансамбленең ”йөҙөк ҡашы” тиҙәр. Төбәгебеҙҙең һандуғасына әйләнгән яратҡан йырсыбыҙ миҙгелдәрҙе онотторол, күңелдәрҙе арбап йәшәй. 25 йыллыҡ ижад юбилейы уңайы менән уға ”Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре” тигән маҡтаулы исем бирелеүе һис тә осраҡлы түгел.*

*Ансамблдең дәртле һәм егәрле ҡыҙының моңло йырҙары юбилей кисәһендә ҡатнашҡан Башҡортостан ҡунаҡтарының да күңеленә хуш килде. Силәбе яҡтары менән дуҫлыҡ күперенә туҙан ҡундырмай йәшәгән шағир Әхмәҙин Әфтәх йырсыбыҙ хаҡында ошондай юлдар әйтте:*

*...Табындарҙы елкендерә*
*Факиһа, Айгөлдәре.*
*Көттөк һеҙҙе, кәрҙәштәр, тип*
*Иркәләй яҙ елдәре.*
*Эх Силәбе, Силәбе,*
*Күптән булған киләһе...*



Факиһа Сафина

*Арғаяш районының Мейәс йылғаһы буйында урынлашҡан Биккол ауылында тыуып үҫкән Факиһа Ғәзелша ҡыҙының моң шишмәһе тап ошо тыуған яҡтарынан башлана.*

*Ул бөгөн ниндәй уй-кисерештәр менән йәшәй? Киләсәккә ниндәй пландары бар? Йырсыбыҙ хаҡында күберәк белергә теләп, уға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.*

**— Хөрмәтле Факиһа Ғәҙелша ҡыҙы, үҙешмәкәр ижади коллективтың халыҡ ансамбле исеменә лайыҡ булыуында һеҙҙең дә хеҙмәт өлөшөгөҙ ҙур, шул турала бер аҙ һөйләп китһәгеҙ ине.**

— ”Айгөл” йыр-бейеү ансамбле минең йыуанысым да, ҡыуанысым да. Ун һигеҙ йәшемдән алып яҙмышым уның менән бәйле. Ансамблдең ҡырҡ йыллыҡ тарихы бар. Уны бөгөн башҡа төбәктәрҙә лә яҡшы беләләр. Рәсәй һәм халыҡ-ара фестивалдәрҙә, бәйгеләрҙә ҡатнашып

призлы урындар яуланыҡ. Силәбе ерендә милли сәнғәтебеҙҙе үҫтереүсе ижади көс, халҡыбыҙҙың рухи терәге ул.

Уҙған утыҙ йыллыҡ ижад осоронда ”Айгөл” менән бергә мин дә үҫтем. Шунса йылдар үҙ милләтенең рухын һүндермәйенсә һаҡлап йәшәгән ансамбль оло хөрмәткә лайыҡ. ”Айгөл”дең исеме бик күп кешеләрҙең ижади яҙмышы менән бәйле. Бында беҙҙең милли йыр һәм бейеү сәнғәтенә яҡын шәхестәрҙең юлдары осрашты. Шағир һәм музыкант Рамазан Шәғәлиев, ирле-ҡатынлы Гөлнур һәм Рәсүл Искәндәровтар, Рамазан Яруллин, Хәниф Ғималетдинов, Рәзимә Ғилманова, Гөлсинә Ғиззәтуллина, Ғәрифулла Нәжметдинов һәм башҡалар оло ихтирамға лайыҡ. ”Айгөл” ансамбле йылдан-йыл үҫә һәм камиллаша бара. Махсус белемле талантлы йәштәр, үҫмерҙәр һәм балалар менән тулылана. Бейеү һәм вокал буйынса йәш төркөмдәр уңышлы эшләй. Йәшәп килгән матур традициялар тағы ла байытыла.

Минең махсус музыкаль белемем юҡ. Ауыл мәктәбенән һуң һөнәрселек училищеһын тамамланым, әле төҙөүсе-крансы булып Силәбе цинк заводында эшләйем. Ә бына йыр-моңға ылығыуыма атайымдың йоғонтоһо көслө булғандыр. Ул мандолинала бик матур уйнай һәм йырларға ярата ине. Бигерәк тә халыҡ йырҙарын яратып башҡара торғайны. Бала сағымда мин уны әҫәрләнеп тыңлай инем. Йырға булған һөйөү күңелемдә шунан бирле йәшәй.

**— Һеҙ заводта эшләйһегеҙ, ”Айгөл” ансамбленә даими йөрөйһөгөҙ, өҫтәүенә, донъя мәшәҡәттәре лә ҡатын-ҡыҙ иңендә бит?..**

— Был йәһәттән бәхетлемен. Тормош юлдашым Әбделмән дә, өс улым да минең терәгем һәм ярҙамсыларым. Үҙҙәре бөтә йорт эштәрен башҡаралар. Сәхнәлә сығыш яһауыма шатланалар ғына. Ошондай ышаныслы терәк булғанда мин тыныс күңел һәм ҙур теләк менән тамашасы алдына сығам.

**— Тыуған ауыл һағындыралыр?..**

— Әлбиттә, тыуған яҡтар һағындыра. Шуға ла яйы тура килеү менән ауылға ҡайтып килергә тырышабыҙ. Концерттар менән дә Арғаяш районында йыш булабыҙ. Уҙған йыл күрше Яраҡкол ауылы мәҙәниәт йортонда 25 йыллыҡ ижад юбилейымды билдәләнек, халыҡ бик йылы ҡабул итте. Йырсыға тамашасының алҡышынан да оло хөрмәт юҡтыр, минеңсә.

**— Репертуарығыҙ менән дә таныштырып китһәгеҙ ине...**

— Минең репертуарҙа тыуған яҡ темаһы төп урынды биләй. Яҡташ шағирҙар һәм композиторҙар менән тығыҙ хеҙмәттәшлек булдырғанбыҙ. Композиторҙар Нил Минязев, Илдар Сәлимов көйҙәренә яҙылған йырҙарҙы айырыуса яратып башҡарам. Өфөнән Илдар Ғүмәровтың йырҙарын үҙ итәм. Силәбе башҡорттары араһында киң таралған халыҡ йырҙарын ихлас йырлайым. Мәҫәлән, ”Арғужа” тигән халыҡ йырын бала сағымдан йырлап үҫтем.

**— Ансамблде тирә-якта ла көтөп алалар...**

— Төрлө тарафтарҙа сығыш яһайбыҙ. Силәбе ҡалаһында мәҙәни саралар ойоштороуҙа милли ойошмаларға ҙур ярҙам күрһәтәбеҙ. Шәйехзада Бабич исемендәге милли китапхана ойошторған байрамдарҙа йыш ҡатнашабыҙ. Өлкәлә уҙғарылған ”Уралым” йыр бәйгеһендә һәм Силәбе ҡалаһында традицияға әйләнгән ”Уралда ҙур Науруз” төрки халыҡтары фестивалендә даими сығыш яһайым.

**— Беҙ бөгөн ”Айгөл” йыр-бейеү ансамбленең төрлө урындарҙағы йәнле һәм йәмле сығыштарын күреп сикһеҙ һөйөнәбеҙ. Улар халҡыбыҙҙы рухландыра. Әммә ансамбль ижадында ҡыйынлыҡтар ҙа осрауы мәғлүм.**

— ”Айгөл” ансамбле әле һынатырлыҡ түгел. Өлкән быуын йырсыларға алмашҡа һәләтле балалар һәм үҫмерҙәр килә, ҡурайсылар төркөмөнөң ижади оҫталығы арта. Силәбе сәнғәт академияһын уңышлы тамамлап, ансамблдә вокал төркөмө ойошторған Оксана Ниволина илһамланып эшләй, уның уңыштары һәм киләсәге әле алда. Ғөмүмән, ансамблгә өмөтлө йәштәрҙең килеүе беҙҙе ныҡ ҡыуандыра.

Йырсы булараҡ, гастролдәргә йышыраҡ йөрөргә теләйем. Районларҙа халыҡ рухи аҙыҡҡа һыуһап йәшәй, йыр-моң тулҡындары тамашасының күңелен тибрәтергә тейеш. Белеүебеҙсә, әлегә милли радио һәм телевизион тапшырыуҙар ҙа силәбеләрҙең хыялы ғына булып ҡала килә.

Ансамблдә заманса аппаратура һәм махсус белемле музыканттарҙың етешмәүе эшкә ҡамасаулай. Әммә беҙ ”юҡҡа туҡ” булып йәшәмәйбеҙ, ҡулдан килгәнсә халыҡтың рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә тырышабыҙ. Ҡоролтай ойошторған төрлө сараларҙа, һабантуйҙарҙа, юбилейҙарҙа һәм йыйындарҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. ”Халыҡ ансамбле” тигән исем үҙе үк беҙгә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә.

Бына шундай уй-хыялдар менән йырлап йәшәй Факиһа, сәхнәләргә, халыҡ алдына сыға, моңо менән уйлата ла, йыуата ла, күңелдәргә дәрт-дарман өҫтәй. Быйыл Факиһа Ғәҙелша ҡыҙы Сафинаға 50 йәш тулды. Ғүмер миҙгеленең алтын туйына арыу-талыу белмәй, ижад тауҙарына артыла-артыла аяҡ баҫты ул. Ә тауҙарҙан йыр айырыуса моңло яңғырай.